дар *(“Ауыл хакимиәте башлығы менән осрашыу”, “Мин – президент”, “Министрҙар кабинетында”, “Мин – уҡытыусы”)*; көнкүреш йөкмәткеле уйындар *(“Хужалыҡ тауарҙары магазинында”, “Китап магазинында”, “Дарыуханала”, “Табипҡа күренеү”)* ойоштороу һөҙөмтәле. Улар уҡыусыларға телмәр этикеты нормаларына өйрәтеүҙә, тәрбиә биреүҙә, буласаҡ һөнәренә ҡағылышлы ситуацияларҙа үҙҙәрен тейешле тотоуҙы үҙләштереүҙә маҡсат итеп ҡуя. Шулай уҡ донъяла булып торған ваҡиғалар, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса пресс-конференция, телекүпер, түңәрәк өҫтәл формаһында дискуссиялар ойоштороу студенттарға бик оҡшай.

Практика күрһәтеүенсә, драмалаштырыу алымдарын һәм ролләп уйнауҙы дәрәҫ ойоштороу уҡыусыларҙы һәр яҡлап үҫтереү бурыстарын үтәргә ярҙам итә. Бындай эштең үҙенсәлекле психологик микроклиматы *(кире эмоцияларһыҙ, ебәрелгән хаталар өсөн ҡурҡыуһыҙ)* азатлыҡ атмосфераһын тыуҙыра. Был, үҙ сиратында, башҡорт телен дәүләт теле буларак өйрәнеүселәр алдында торған маҡсатты – телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрен *(һөйләргә өйрәнеү, уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен булдырыу)* практик үҙләштереүҙе бойомға ашыра.

Ролләп уйнауҙы, ижади ҡулланып, дәрестең һәр этабында үткәреп була. Әгәр уҡытыусы дәрестең ҡыҙыҡлы, йәнле булыуын теләһә, үҙенең методик ҡумтаһына ролләп уйнау алымдарын да һалырға тейеш.

# Тексты комплекслы анализлау

**Ә.Р. КӘРИМОВА,**

Өфө ҡалаһының «Берҙәмлек» лицейы уҡытыусыһы

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә тексты комплекслы анализларға өйрәтеү – заман талабы, сөнки уҡыусы үҙ фекерен бәйләнешле туплап, тел саралары ярҙамында еткерә белергә тейеш.

Комплекслы анализ – лингвостилистика һәм әҙәбиәт ғилеменә нигеҙләнеп, тексты тел һәм телмәр йәһәтенән тикшереү. Әҙәби әҫәрҙе анализлау барышында тел һәм әҙәбиәт предметтары араһында үҙ-ара бәйләнеш нығытыла, уҡыусыларҙың белеме системаға һалына. Сығарылыш класс уҡыусыларын текст менән эшләргә өйрәтеү айырыуса мөһим, сөнки башҡорт теленән берҙәм региональ имтихандың В, С өлөштәрендә бирелгән өҙөккә комплекслы анализ ҡаралған.

Тексты анализлау тасуири уҡыу, бирелгән өҙөктөн темаһын һәм идеяһын, тибын һәм стилен билдәләүҙән башлана. Уҡыусының телмәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән был эштәрҙе бөтә класс менән башҡарыу ҙур һөҙөмтә бирә.

Артабанғы биремдәр тел ғилемен үҙ эсенә ала. Уларҙы баланың белем кимәленән, дәрескә ҡуйылған маҡсаттан сығып, нисек *(үҙ аллы – төркөмләп, класта – өйҙә, тулы – өлөшләтә)* башҡарыуҙы уҡытыусы үҙе һайлай. Шуныһы мөһим: текстар үҙгәргән һайын, эштәр ҙә ҡатмарлаша.

Анализ барышында түбәндәге эш төрҙәре тәҡдим ителә:

– *коллектив эш* балаларҙа ойошҡанлыҡ, берҙәмлек тәрбиәләй, енеү дәрте, сәм уята. Шулай ҙа уның уңышһыҙ яғы ла бар: уҡытыусы тарафынан иғтибар бөтә уҡыусыға ла тигеҙ бүленмәй. Шул сәбәпле эш төрлө формала ойоштороloрға тейеш;

— *парлы эш*, ғәҙәттә, ике уҡыусыға бер эш биреп эшләтеү, тип билдәләнә. Был ҡараш дөрөҫ түгел. Парлы эш ваҡытында ике балаға ике эш төрө бирелергә тейеш, эш барышында ауырлыҡтар килеп тыуһа, улар бер-береһенә ярҙамлаша ала;

— *төркөмдәр менән эшләү* һәр уҡыусыны ижади эшкә йәлеп итеү, яуаплылыҡ тәрбиәләү йәһәтенән уңайлы;

— *индивидуаль эш* барышында иһә уҡыусы, алдағы дәрестәрҙә алған белеменә таянып, бер ниндәй ярҙамға ла мөрәжәғәт итмәй, үҙ аллы эшләргә өйрәнә.

Эштең күләме ҙур булыу сәбәпле, комплекслы анализды парлы дәрестәрҙә үткәреү отошло. Тел һәм әҙәбиәт ғилеме буйынса эштәрҙе айырым, ижади эште айырым баһаларға мөмкин. Уҡыусы тарафынан башҡарылған анализға уҡытыусы баһа ҡуйғандан һуң, мотлаҡ хаталар өҫтөндә эш үткәрелергә тейеш.

Миҫалға М. Кәримдең «Өс таған» повесынан алынған өҙөккә эш төрҙәре тәҡдим ителә (XI класс уҡыусылары өсөн).

*Вәзирҙең кемгәлер яҡшылыҡ эшләгәнe, кемделер ҡыуандырғыһы килде. Ул салбарының һул кеҫәһендәге һалҡын ғына тос нәмәне ҡапшап ҡараны.*

*Малайҙар ә малайҙар туҡтағыҙ әле тине ул башлыҡҡа ҡоралһыҙ йөрөү килешмәҫ мә Ғабдулла ал ул кеҫәһенән һөйәк һаплы бороңғо бәке сығарып Ғабдуллаға һуҙҙы.*

*Башлыҡ менән йүгеректең дүрт күҙе һигеҙ булды.*

*— Ҡайҙан кулға төшөрҙөң быны?*

*— Һорашып торма, биргәндә ал.*

*Ләкин башлыҡ бүләкте алырға ашыҡманы. Бәке оҡшаны уға, бик оҡшаны. Тик: «Был нәмә Вәзир ҡулына яҙып-яңылышып килеп инмәнеме икән», — тигән шик уны тыйып ҡалды.*

*— Ҡайҙан алдың, дөрөҫөн әйт. Юғиһә бәкеңә бармаҡ осомдо ла тейҙермәйем.*

*— Биргәс, ал да ҡуй.*

*— Ҡайҙан алдың, тиҙәр һиңә?*

*— Дөрөҫөн генә әйткәндә, бая мин уны Шәрифулланың сумкаһынан сәлдерҙем.*

*— Урланыңмы? — Башлыҡ ике юлдашын ике яҡҡа этәреп ебәрҙе. Күҙҙәренән уның усал осҡондар сәсрәп сыҡты.*

*— Урламаным, сәлдерҙем, — тип аҡланды Вәзир, — һабы күренеп тора ине.*

*— Ух, бәке ҡарағы! — Ғабдулла уға бер ҡуныл та төштө. — Көтөүсе Шәрифулланың һөйәк һаплы бәкеһен урлаған өсөн, ҡараҡ Вәзирҙе «Өс таған»дан сығарып ташларға. Бынан һуң уға ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа. Мәсхәрә!*

**Эш төрҙәре:**

1. Өҙөккә исем бирергә. Темаһын билдәләргә.
2. Был өҙөктөң текст икәнен иҫбатларға.
3. Төп фекерҙе билдәләргә.
4. Тестың тибы һәм стиле (иҫбатларға).
5. *Вәзир* һүҙенә фонетик анализ яһарға.
6. *Һукты* һүҙенең синонимын табырға.
7. Түбәндәге һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһен асыҡларға:
   *юлдаш — ... ; мәсхәрә — ... .*
8. Өҙөктән һүрәтләү сараларын табырға.
9. Текстан ҡушма һүҙҙәрҙе күсереп яҙырға һәм яһалышы буйынса анализларға.
10. *Бәке* һүҙен килештәр менән үҙгәртергә.
11. Икенсе абзацҡа пунктуацион анализ яһарға.
12. Теҙеү юлы менән яһалған һүҙбәйләнештәрҙе күсереп яҙырға, төрөн билдәләргә.

Текска комплекслы анализ яһарға өйрәтеү — һөҙөмтәле күренеш, сөнки уҡыусыларҙың телмәре үҫә, һүҙ байлығы, инша яҙыу оҫталығы арта. Анализдың был төрө, уҡыусыларҙың грамоталылығын арттырыу менән бер рәттән, ижади фекерләүҙе үҫтереүгә лә булышлыҡ итә, ғилми-тикшеренеү эшенә нигеҙ һала.